# Кинйәбулатова Кәтибә Кәрим кыҙына



# 100 йәш

# *Кинйәбулатова Кәтибә Кәрим ҡыҙы*



15 сентябрь
1920 йылда
Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Мәүлит ауылында уҡытыусы тыуған

*Яҙыусының әсәһе Фатима һәм атаһы Кәрим Кинйәбулатовтар*







Кәтибә
Кинйәбулатованың
студент ваҡыты
1936 йыл



1941-1953 йылдарҙа Арғаяш районының Ҡолой урта мәктәбендә уҡытыусы булып эшләгән осоро



1953 йылдан Өфөлә “Әҙәби Башҡортостан” журналы редакцияһында , ә 1960-1962 йылдарҙа Мәскәүҙә СССРҙың яҙыусылар союзы Юғары әҙәбиәт курсында белем ала. 1968-1975 йылдарҙа “Башҡортостан ҡыҙы” журналында баш редактор булып эшләй.



Ҡайттым ялға тыуған яҡтарыма,
Ел-ямғырлы булды юлдарым,
Ә шулай ҙа күңелем - ҡанатлы ҡош,
Гел шатлыҡлы ғына уйҙарым.

Кәтибә Кинйәбулатова улы Рамаҙан менән
1952 йыл. Мейәс буйы.

# Фотоархив







Шағирә улы Рамаҙан,
килене Ольга,
ейәне
Кәрим менән



Туғандары менән

1987 йыл










Иҫтәлекле осрашыуҙар



Башкорт телендә махсус бит №9 (99)
Сентябрь, 2018 йыл

## Вакиға

### Исеме мәңгеләштерелде

*Башка булмышым юк,*
*Шиғриәткә*
*Хеҙмәт итеү – барлык бурысым.*
*Бер әйтмәһә, бер әйтерҙәр әле –*
*Йәшәне тип, ихлас йыр өсөн!..*

***Кәтибә Кинйәбулатова.***

***Арғаяш районында быйыл аҫыл якташыбыҙ, күренекле шағирә Кәтибә Кинйәбулатованың исеме мәңгеләштерелде. Колой ауыл китапханаһына уның исеме бирелде. Район хакимиәте шағирә исемендә әҙәби премия булдырҙы.***

## Якташыбыҙ

### “Әйләнһәмсе һайрар кошка мин”

***15 сентябрҙә якташ яҙыусыбыҙ Кәтибә Кинйәбулатоваға 98 йәш тулыр ине.***

Арғаяш ерe талантлы яҙыусылар биргән, шуларҙың береһе – Кәтибә Кинйәбулатова. Ул шағирә булып донъяға тыуған: баштан-аяк шағирә. Әллә инде тәбиғәт косағында, матур Мейәс буйында тыуып үҫкәнгәме?..

Ул Мәүлит ауылы кыҙы, тәрбиәле ғаиләлә үҫкән (атаһы – укытыусы, әсәһе – оҫта тегенсе). Кәтибә бала сағынан кескәйҙәргә лә, ололарға ла бик тә хөрмәтле, иғтибарлы, ярҙамсы була. Ул бөтә йәшәйешен якшылыкка кора. Атаһын хакһыҙ ғәйепләп кулға алалар. Ауыр ғаилә кайғыһы Кәтибәне балалыктан ололар рәтенә баҫтыра.

Өфөлә рабфакта укый. Институтка керә. Һуғыш башланғас, ситтән тороп укыуға күсә. Әсәһен, туғандарын караша. Ошо йылдарҙа ул Колой мәктәбендә башкорт теле укытыусыһы.

Эшләй ҙә, укый ҙа, яҙа ла. Шиғырҙары уның шишмәләй кайнап сығып торалар, уларҙы тәбиғәттән айырырлык түгел (һайрар коштар, сәскәләр, темалары ла: яҙ, йәй, көҙ, кыш). Халыктың йәшәйеше шулар менән.

Шиғырҙары оло һөйөү, йылы, нәфис тойғолар, кешелекле, изгелек менән һуғарылған, улар бөйөк йөрәк көсө менән яралғанлар. Уларҙы укып, йәшәү көсө, ышаныс алаһың, ләззәтләнәһең.

Яҙыусының ижадына милли дуҫлык хас. Был бигерәк тә “Партизан кыҙы” повесында сағыла. Һуғыш барған йылы, ауылдарҙан килгән төрлө милләт кешләрен каршылап урынлаштырғанда һәр бер башкорт ғаиләһе бәләкәй өйөндә урын, аҙык-түлек табып, ысын күңелдән кабул итә.

Кәтибә Кинйәбулатова киң күңелле, кешелекле, тәрән, бай хисле, йырлы, моңло, илен, халкын һөйөүсе яҙыусы булды.

“Әйләнһәмсе һайрар кошка мин” – ошо һүҙҙәре уның йәшәйешен, ижадын раҫлай ҙа инде.

*Сибәр ҙә һин,*
*һөйкөмлө лә,*
*Моңло, йырлы ла,*
*Оло рәхмәт ата-әсәнә,*
*Шундай талант*
*бүләк иткәнгә!*

**Нәғимә УСМАНОВА,**
**педагогия хеҙмәт ветераны.**

## Иҫтәлек

“Арғужа” гәзитенең беренсе бите



***Эй, туған тел, нәфис телем һин,***
***Наҙлы моңоң мине һуғарған.***
***Күңелдәрем һүнмәҫ – һүрелмәҫ***
***Әсә телкәйенән нур алған.***



Ауылының күркәм тәбиғәте, йырлы-моңло, әкиәтле ғаиләһе Кәтибә Кинйәбулатованы шағирә итеп тәрбиәләй. Бәләкәстән мөғжизәләргә ышаныусы, рәссам дә, музыкант та булырға хыялланыусы ҡыҙ башланғыс белемде тыуған ауылында үҙ атаһынан ала. Һуңынан Мөхәмәтҡолой мәктәбен тамамлап, Өфө Педрабфактҡа уҡырға инә. Уҡытыусы һөнәрен үҙләштергәс, 1941-1953 йылдарҙа Силәбе өлкәһендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй. Бер ваҡытта ла әҙәбиәттән, йыр-шиғырҙан, яратҡан музыка ҡоралы – мандолинаһынан айырылмай.

Донъяны бала күҙе һәм сафлығы менән ҡабул иткән оло йөрәкле шағирә кескәйҙәр өсөн дә күп әҫәрҙәр ижад итә.




## ТЕЛӘК

*Уйым таша, ләкин шиғырҙарым*
*Уйҙарыма һис бер тиң килмәй.*
*Эй, Ватаным!*
*Һиңә тиң һүҙ әйтһәм,*
*Ғүмерем үтер ине үкенмәй.*
*Кеше ғүмере бит биш килмәй.*



Уйҙар, уйҙар...



- Дорогая Катиба, для Вас весь мир поэзия, потому что Вы поэт Божьей милостью, поэт не только для других, но и для себя.

  Ваша книга «Травинка» насыщена радостью золотой листвы, птичьих голосов, ветров, цветов, звезд, облаков и подлинная поэтичная, светлая, чистая, как горный ручей…

Корней Чуковский

# Яҙыусының ижады:

- «Белая козочка — золотое копытце» (*«Алтын тояк — ак кәзә»*) — 1955
- «Зелёные листья» (*"Йәшел япрактар*) — 1958
- «Аниса» (*"Әнисә*) — 1960
- «Неугасимая любовь» (*«Һүнмәҫ мөхәббәт»*) — 1962
- «Голос отца» (*«Атай тауышы»*) — 1964
- «Минуты» (*«Минуттар»*) — 1965
- «Беркут» (*«Бөркөт»*) — 1966
- «Звёзды пляшут» (*«Йондоҙҙар бейей»*) — 1969
- «Золотой ключик Айгузали» (*«Айгүзәлдең алтын асҡысы»*) — 1970
- «Внучка партизана» (*«Партизан ейәнсәре»*) — 1974
- «Слово живым» (*«Һүҙ тереләргә»*) — 1971
- Лирика — 1975




Кәтибә Кинйәбулатова
ТӨПКӨЛГӘ СӘЙӘХӘТ


КАТИБА
КИНЬЯБУЛАТОВА
Нет милей на свете стран»


Кәтибә КИНЙӘБУЛАТОВА


К45
Кәтибә Кинйәбулатова
МИН ЙЫРЛАЙЫМ


Катиба Киньябулатова
ОТЦА


Катиба КИНЬЯБУЛАТОВА
ВНУЧКА ПАРТИЗАНА
ИЗДАТЕЛЬСТВО «ДЕТСКАЯ ЛИТЕРАТУРА»


С(Башк)
К45
ИРЕН КИНЙӘБУЛАТОВ
СЫЙЫРСЫКТАР БАЛА ОСОРА


65
Кәтибә Кинйәбулатова
ВЕТЕРАНДАР


Кәтибә Кинйәбулатова
АҪЫЛТАШТАР ИЛЕНДӘ
С(Башк)
К45


К. КИНЙӘБУЛАТОВА
Йәшел
ЯПРАКТАР

Кәтибә Кинйәбулатова
Турғайзар
рәхмәте
шиғырзар, әкиәттәр, сценарийзар

Катиба Киньябулатова
ГОЛОС СЕРДЦА

Кәтибә Кинйәбулатова
әсә һулышы

Кәтибә
КИНЙӘБУЛАТОВА
Әйләнһәмсе
һайрар ҡошҡа

КАТИБА
КИНЬЯБУЛАТОВА
Внучка
партизана
Пер. Р. Хакимов


ГОЛОС СЕРДЦА
Кәтибә Кинйәбулатова
Барыһы ла тыуған еремдә

# Наградалары, премиялары :

- орден Почёта (15.08.1991)
- Заслуженный работник культуры Башкортостана
- Лауреат Государственной премии РБ имени Хадии Давлетшиной (2011)

